*Радил МӨХӘМӘТДИНОВ,*
*Башкортостан Республикаһы Президенты эргәһендәге*
*Дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы доценты,*
*ауыл хужалығы фәндәре кандидаты*



*Радил Ҡыяметдин улы Мөхәмәтдинов республикала билдәле шәхес. Вакытында ул КПСС райкомының беренсе секретарҙары араһында иң йәше ине һәм Салауат, Тәтешле райондарын егерме йылдан ашыу етәкләне. Башкортостан Республикаһы ауыл хужалығы һәм аҙык-түлек министрының беренсе урынбаҫары, Башкортостан ер ресурстары һәм ер төҙөлөшө буйынса дәүләт комитеты рәйесе булып эшләгән йылдарҙа ла республика ауыл хужалығын үҫтереүгә байтак өлөш индерҙе һәм хәҙер туплanған бай тәжрибәһен Башкортостан Президенты эргәһендәге Дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы тыңлаусыларына йомарт өләшә.*

**Баҙар иҡтисады шарттарында ер мөнәсәбәттәрен реформалауҙы тамамларға һәм файҙаланыуҙың һөҙөмтәле системаларын булдырырға, ерҙең социаль, инвестицион, етештереү ҡеүәтен арттырырға кәрәк. Был өлкәлә дәүләт сәйәсәте беренсе ситтта һалым һалыуҙы көйләү һәм ер участкаларын иҡтисади әйләнешкә йәлеп итеү, республикала көйләнеүсе ер баҙарын һәм уның инфраструктураһын булдырыу маҡсатында бөтә категориялы ерҙәргә кадастр баһалауын үткәреүҙе үҙ эсенә алырға тейеш.**

(Башҡортостан Республикаһы Президенты М.F.Рәхимовтың Дәүләт Йыйылышына Хатынан).

# КҮҘ ҠАРАҺЫ КЕҮЕК ҺАҠЛАЙЫҠ

Быйыл ер һәм аграр реформалар башланыуға 10 йыл тула. Уҙған ваҡыт эсендә республика халҡының күпселеге ошо реформаларҙа туранан-тура ҡатнашып, үҙҙәренең ер проблемаларын хәл итте һәм уларҙы закон нигеҙендә нығытты. Бөтә Рәсәй Федерацияһындағы кеүек, Башҡортостан Республикаһында ла ер реформаһы ауыл хужалығы производствоһы үҫешенең түбән темпта булыуына, тупраҡтың уңдырышлығы тайпылышһыҙ кәмей барыуға һәм ауыл хужалығына бүленгән капитал һалыуҙарҙың үҙен аҡламауына, ерҙе файҙаланыуҙың монополия характерында булыуына бәйләнгән.

Ер реформаһы 1906 йылдың 9 ноябрендә башланған Столыпин реформалары осоронда айырыуса үҫеш ала. Ул ерҙе дәүләттән айырып алып крәҫтиәндәргә биреүҙең объектив һәм мөһим процесының дауамы булып тора. Реформа ун йыл дауам итә һәм 1917 йылда өҙөлөп, һуңынан икенсе йүнәлеш ала: СССР Үҙәк Башҡарма Комитеты һәм Халыҡ Комиссарҙары Советының 1930 йылдың 1 мартындағы “Ауыл хужалығы артеленең өлгөлө

уставы тураһында" ҡарары менән крәстиән хужалыҡтары аҡрынлап тотош коллективлаштырыуға күсте.

Был осорҙағы реформалар ҡалалағы ерҙәргә лә, сәнәғәт ерҙәренә лә, ғөмүмән, бөтә халыҡтың иҡтисади мәнфәғәттәренә лә ҡағыла. Әммә ҡалаларҙағы, башҡа шундай халыҡ йәшәгән төбәктәрҙәге, урман фондындағы ерҙәрҙәге мөнәсәбәттәрҙе яйға һалыу нигеҙҙәре һәм хоҡуҡ нормалары ауыл хужалығы ерҙәрендәгенән ҡырҡа айырыла.

Был Рәсәй дәүләте, шул иҫәптән хәҙерге Башҡортостан биләмәләрендә беренсе реформа түгел. 1629 йылда, мәҫәлән, бөтә Рәсәйҙә, шул иҫәптән Уралда һәм Себерҙә лә, буш ятҡан ерҙәрҙе асыҡлау һәм уларҙы хеҙмәттәре өсөн кешеләргә ғүмерлеккә йәки ваҡытлыса файҙаланыуға биреү буйынса ҙур эш атҡарыла. Ә 1754 йылдан бөтә Рәсәй буйынса ер биләүселәрҙең тыныслығын раҫлау һәм ер биләмәләренең сиктәрен дөрөҫ һәм аныҡ билдәләү буйынса эш башлана. Был аҫаба ерҙәре, крепостное право, ерҙе файҙаланыуҙың община формаһы нығынған һәм сәскә атҡан осор була. Шуны билдәләп үтергә кәрәк, был йылдарҙа Башҡортостан биләмәләренә күсеп килеп ултырыусылар һаны ундағы төп халыҡ һанынан артып китә. Шуға күрә ерле халыҡ "үҙ ерен бүлешергә" мәжбүр була. Был хәл йыш ҡына крәстиәндәрҙе Ер һәм Ирек өсөн ҡораллы восстаниелар һәм сыуалыштарға этәрә. Батша властары башҡорттар Рәсәй дәүләтенә ҡушылғанда ҡул ҡуйылған ер мәсьәләһе буйынса килешеү шарттарын боҙа.

1861 йылда крепостное право бөтөрөлһә лә ерҙе общиналап файҙаланыу һәм элекке ер биләүселәрҙең хоҡуғы һаҡлана.

1865 йылғы законға ярашлы, башҡорттарҙа аҫаба ер биләүселек хоҡуғы һаҡлана. Ләкин батша хөкүмәтенең башҡорттарға ҡарата колониаль сәйәсәте әле XVIII быуаттың 30—90-сы йылдарында уҡ етди социаль-иҡтисади эҙемтәләргә килтерә. Аҫаба хоҡуғы һаҡланыуға ҡарамаҫтан, башҡорттар был йылдарҙа үҙҙәренең 50 проценттан күберәк ер биләмәләрен юғалта. Төбәкте колонияға әйләндереү ҡыҙыу бара. XVIII быуат аҙағына башҡорт ерҙәрендәге рус ҡәлғәләре гарнизондары ғына 1 миллион 300 мең гектарҙан ашыу ерҙе биләгән. Бынан тыш завод хужалары һәм дворяндар осһоҙ хаҡҡа бик ҙур ер биләмәләрен һатып ала, был ерле халыҡты асыҡтан-асыҡ талау була. Һәр завод уртаса алғанда 60-100 мең десятина ер биләп ултырған. Әйтәйек, Сим заводы Салауат Юлаевтың атаһы, старшина Юлай Аҙналиндың ерҙәрендә төҙөлгән. Эш судҡа барып етә. Әммә суд Аҙналиндан 700 һум штраф түләтә.

Столыпин реформалары заманында Рәсәйҙең бик күп крәстиән ғаиләләре, яҡшыраҡ тормош эҙләп, Волга йылғаһы аръяғына, Уралға, Себергә күсеп ултыра. Элекке Өфө губернаһы сиктәрендә генә 1879-1910 йылдар осоронда күскенселәр иҫәбенә һөрөнтө ерҙәрҙең майҙаны 2288 мең гектарға арта.

Ерҙәрҙе үҙләштереү күп ваҡыт йыртҡыстарса төҫ ала. Был осорҙа ҡайһы бер райондарҙа сиҙәм ерҙәр генә һөрөлөп ҡалмай, урмандарҙың да яртыһы, ә Бәләбәй ҡалҡыулығындағы урмандарҙың 70 проценты тиерлек юҡ ителә. Быуаттар буйына тулҡынланып ултырған ҡылғанлы далалар һөрөлә, ә шул уҡ ваҡытта был осорҙа игендең уңдырышлығы гектарынан 3,5-5 центнерҙан артмай.

Революция алдынан крәстиәндәрҙең ер менән тәьмин ителеше йән башына уртаса 2,5 гектар тәшкил итә. Һәр йөҙ кешегә 108 гектар сәсеүлек ере, 212 баш мал тура килә.

1917 йылдың 8 ноябрендәге "Ер тураһында" декрет менән ергә шәхси милексселек бөтөрөлә. Ә 1918 йылда йән башына ҡарап ерҙе ҡайтанан бүлеү, йәғни "ҡара бүленеш" башлана. Әммә 1921 йылғы аслыҡ һәм граждандар һуғышы ауыл хужалығына ҙур зыян килтерә. Һөҙөмтәлә Өфө губернаһында 1917 йылда халыҡ һаны 3007 мең булһа, 1922 йылда ул 2202 меңгә ҡалған (йәки 805 меңгә кәмегән); сәсеүлек майҙаны 3152 меңдән 1490 мең гектарға төшкән; малдар һаны 2236 меңдән 845 мең башҡа кәмегән. Дөрөҫ, һуңынан 1922 йылда ҡабул ителгән ерҙе файҙаланыу тураһында закон һәм БАССР-ҙың 1923 йылғы беренсе Ер кодексы ерҙе файҙаланыуға бер аҙ аныҡлыҡ индерә.

Был осорҙа крәстиән хужалыҡтарының төрлө формалары — айырым, коллектив, совхоз — үҫешкә тиң хоҡуҡ алды. Әммә Башҡортостан ауыл хужалығының ул осорҙағы үҫеш темпы бөтә Рәсәйгә ҡарағанда ла түбән була. 1928 йылда сәсеү майҙаны 1917 йыл менән сағыштырғанда 80,5 процент, һыйыр малдары — 83 процент, аттар — 67

процент, суҫҡалар 58 процент тәшкил итә. Бындай аҡрын үҫештең сәбәбе крәҫтиән хужалыҡтарының бәләкәй булыуында тип иҫәпләйҙәр. Эре ижтимағи производство һәм ер менән файҙаланыуҙың өҫтөнлөгө хаҡында теория барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, 1928 йылдан дәүләт ер запасындағы буш ерҙәрҙә эре иген һәм малсылыҡ совхоздары төҙөү башлана. Уларҙың ҡайһы берҙәре әлегәсә һаҡлана.

1929 йылда крәҫтиән хужалыҡтарын күпләп коллективлаштырыу башлана, уларға дәүләт милке булған ерҙәр ҙә мәңгелеккә файҙаланыуға тапшырыла. Асылда был ерҙе файҙаланыуҙың община ысулына кире ҡайтыу ине. Алға китеп булһа ла шуны әйтергә кәрәк: әлеге реформаларҙы һәм ауыл хужалығы предприятиелары ағзаларына ер бүлеп биреүҙе сағыштырһаң, ер менән тарихтың күп тапҡыр ҡабатланыуы күренә. Артабан 1950 йылда элек төҙөлгән колхоздарҙы эреләтеү барышында, 1965 йылда иҡтисади яҡтан артта ҡалған колхоз һәм совхоздарҙы үҙгәртеп ҡороу ваҡытында ла ер мөнәсәбәттәре күтәрелә.

Республика тарихында сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштереү һиҙелерлек эҙ ҡалдырҙы. 1954 йылдан 1964 йылға тиклемге 10 йыл эсендә 564 мең гектар ер үҙләштерелә. Йыш ҡына эрозия ҡурҡыныcы янаған, һөрөргә ярамаған ерҙәр ҙә һөрөлә. Һөҙөмтәлә 240 мең гектар ер әйләнешенән сығарыла. Бөтә закондар буйынса файҙаланыуға күсереү тыйыла. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, был ҡағиҙә йыш ҡына боҙола. Беҙҙең Башҡортостанда һуңғы 30 йылда ошо сәбәп арҡаһында ауыл хужалығы ерҙәре — 200 мең гектарға, һөрөнтө ерҙәр — 180 мең гектарға кәмене. Бынан тыш ерҙәр насарланыу һөҙөмтәһендә һуңғы 5 йылда ғына 600 мең гектар һөрөнтө ер файҙаланыуҙан төшөп ҡалды. Бик күп районлар буйынса ерҙәрҙе үҙләштереү һәм һөрөнтө ергә әйләндереү экологик йәһәттән хәүефһеҙ кимәлдән артып китә. Көнбайыш Европа, АҠШ һәм Канада илдәрендә халыҡ һаны күберәк булғанда ла һөрөнтө ерҙәр дәүмәле 30-35 проценттан артмай. Беҙҙә күпселек далалы, шулай уҡ дала булмаған райондар буйынса был күрһәткес — 60-70 процент, ә Тәтешле, Баҡалы районларында хатта 80 процентҡа етә. Республика буйынса дөйөм алғанда һөрөнтө ер ауыл хужалығы ерҙәренең 65 процентын тәшкил итә. Был бик күп һәм зарарлы.

Башҡортостан Республикаһының ер ресурстары байтаҡ. Уның биләмәләре 14,3 миллион гектарға тиң. Биләмәләре төньяҡтан көньяҡҡа табан — 550, көнбайыштан көнсығышҡа 440 саҡрымға һуҙылған. Тәбиғәте иҫ киткес гүзәл булған төбәк ул Башҡортостан. Республика сиктәрендә вертикаль һәм горизонталь зоналар — ҡоролоҡло даланан алып таулы-урманлы шарттар күҙәтелһә, Ирәмәл тауы түбәһендә ул тундра тупрағына күсә.

Рәсәй Федерацияһының башҡа республикалары, өлкәләре араһында Башҡортостан һөрөнтө ерҙәр майҙаны буйынса 4-се урында тора. Ауыл хужалығы ерҙәре 7,8 миллион гектар, йәғни дөйөм майҙандың 55 процентын, һөрөнтө ерҙәр 4,8 миллион гектар тәшкил итә. Республикала һәр кешегә 1,8 гектар ауыл хужалығы ерҙәре һәм 1,15 гектар һөрөнтө ер тура килһә, Рәсәй буйынса был күрһәткес 0,89 гектарҙан артмай. Дөйөм алғанда, республиканың ер фонды уңдырышлы ерҙәргә бай. Һөрөнтө ерҙәр составында ҡара тупраҡлы ерҙәр дәүмәле 70 процентҡа етә. Ҡалғаны — нигеҙҙә көлһыу урманлы тупраҡ. Ҡырмыҫҡалы, Стәрлетамаҡ, Илеш, Дүртөйлө, Ауырғазы, Мәләүез, Өфө, Саҡмағош районларының күпселек хужалыҡтары йыл һайын һәр гектарҙан 30-40, ә ҡайһы баҫыуҙарҙан 50-шәр центнер уңыш үҫтереп ала. Ҡара тупраҡлы булмаған ерҙәрҙән дә оҫта хужалыҡ иткәндә һәр гектарҙан 30 центнер һәм унан да күберәк уңыш алырға мөмкин. Ер байлыҡтарын рациональ файҙаланыу — ер реформаларының асылы шунда. Башҡортостан Республикаһы Конституцияһының 10-сы статьяһында былай тип яҙылған: “Башҡортостан Республикаһында ер һәм башҡа тәбиғәт ресурстары уның күп милләтле халҡының тормош һәм эшмәкәрлек нигеҙе булараҡ файҙаланыла һәм һаҡлана”. Ә милек булараҡ “Ер һәм башҡа тәбиғәт ресурстары шәхси, дәүләт, муниципаль һәм башҡа формала булырға мөмкин”. Башҡортостан Республикаһы Конституцияһының шул уҡ 10-сы статьяһында: “Ергә хужа булыу, уны файҙаланыу Башҡортостан Республикаһы закондары һәм дәүләт власының федераль органдары менән килешеүҙәр нигеҙендә яйға һалына”, тип һыҙыҡ өҫтөнә алына. Кон-



05-2001.p65 80 27.07.01, 12:06

ституцияның был положениеһы күпме һаҡланыр, уны ваҡыт күрһәтер. Әммә илдә ер реформаһы артыҡ ҡатмарлы һәм күп планлы булып сыҡты. Байтаҡ йылдар инде Рәсәйҙә һәм уның субъекттарында ер тураһында ҡыҙыу бәхәстәр бара. Төрлө кимәлдәге кешеләр: ер менән туранан-тура бәйләнгән ябай крәҫтиәндәрҙән башлап Дәүләт думаһындағы үҙ-үҙенә артыҡ ышанған һәм ергә бер ниндәй ҡатнашы булмаған әфәнделәр ҙә бәхәсләшә. Киң матбуғат сараларында түләүле "белгестәр" ил граждандарының аңын өҙлөкһөҙ эшкәртә. Мәҫәлән, В. Никонов тигән ниндәйҙер бер журналист (ул тағы ниндәйҙер "Сәйәсәт" фондының президенты ла) "Труд" гәзитенең 2001 йылдың 3-сө февралендә сыҡҡан һанында былай тип яҙа: "Беҙ шуның өсөн ярлыбыҙ, сөнки төп байлығыбыҙ булған ер тейешенсә баһаланмаған, уның өсөн тейешле налогтар түләнмәй, ергә шәхси милексělek һәм һатыу-һатып алыу булмағанлыктан сит илдәрҙән инвестициялар инмәй, банктан кредиттар алып булмай һ.б." Күрәһең, Никонов әфәнде әлегә налогтар инеү күләменең налог шкалаһы һәм ставкаларына түгел, ә ерҙе файҙаланыусылар һәм ергә хужа булыусыларҙың түләргә һәләтлек кимәленә бәйле икәнлеген белмәй. Башҡортостан халҡы өсөн быуындан-быуынға күсә килгән бер хәҡиҡәт йәшәй: яҡшы һәм етеш тормош һәр саҡ Ер һәм Ирек менән бәйле. Ер мәсьәләһе һәр ваҡыт иҡтисад һәм сәйәсәт менән генә түгел, ә рухи, әхлаҡи, үҙ-ара ярҙам һәм теләктәшлек менән ауаздаш булған.

Башҡортостан Республикаһы Рәсәй Федерацияһының субъекты булып тора һәм шуға күрә ер реформаһы күп йәһәттән Рәсәй норма-хоҡуҡ актарына нигеҙләнә. Шулай ҙа реформалар уҙған йылдарҙа Мәскәүҙәге уң һәм һул иптәштәр төп мәсьәләлә килешеү таба алманы. Ошо сәбәп арҡаһында Рәсәйҙең Ер кодексы проекты һигеҙ йыл буйы инде өсөнсө парламент ултырыштарында тикшерелә. Рәсәйҙең тәүге Президенты ла был мәсьәләне хәл итә алманы. Бәхеткә күрә, беҙҙең Башҡортостан Республикаһында тәүҙән үк, Рәсәйҙәгенән айырмалы рәүештә, граждандарҙың ер мәсьәләләрен тейешле аңлауына өлгәшелде.

Реформалар Башҡортостан Республикаһының Юғары Советы тарафынан 1991 йылдың мартында "Башҡорт АССР-ында ер реформаһы тураһында" Закон ҡабул ителеүҙән башланды. Законда ерҙе ҡабаттан бүлеү тәртибе, реформаға етәкселек итеүсе органдар һәм уларҙың вәкәләтлеге, ерҙе бүлеү нормалары билдәләнде. Ләкин ул замандағы төп мәсьәлә — ергә шәхси милексělek (Мәскәү "демократтары" тап ошо яҡлы) — ҡабул ителмәне.

Ул республиканың күпселек граждандарының фекеренә тап килә ине. Йылдар үтә торҙо. Мәскәүҙә иһә сәйәси ҡаршылыҡ шул тиклем көсәйҙе, 1993 йылдың көҙөндә «Аҡ йорт»та атыу тауыштары яңғыраны, артабан иһә референдум үткәреү юлы менән (дөйөм халыҡ тикшереүенә ҡуймайынса) Рәсәйҙең яңы Конституцияһы ҡабул ителде. (Әйткәндәй, ул беҙҙең республикала хуплау тапманы). Артабан Президент Ельцин Указ менән Рәсәйҙә ер менән һатыу итеүҙе тыйған Ер кодексын юҡҡа сығарҙы. Ошо ваҡыттан алып Рәсәйҙә дөйөм алғанда Ер кодексы бар, ә уның ҡалған өлөшө менән эшләү мөмкин түгел. Ошо документ тирәһендә ыҙғыш-тартыш 8 йыл дауам итә. Шуларҙың бөтәһен дә иҫәпкә алып, 1995 йылдың декабрендә ер менән һатыу итеү мәсьәләһе Башҡортостан Республикаһы граждандарының дөйөм референдумына сығарылды. Рәсәй өсөн бындай ҡатмарлы хәлдә бик дөрөҫ ҡарар ине был, сөнки Башҡортостан Республикаһын консерватизмда, реформаларҙы тотҡарлауҙа һ.б. ғәйепләй башлағайнылар. Республика граждандары референдумда күпселек тауыш — 86 процент — менән ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙе һатыуға ҡаршы сыҡты. Шулай уҡ граждандарҙың фекерен иҫәпкә алып, 1995 йылда БР Президенты Указы менән граждандар файҙаланған бөтә төр ерҙәр шәхси милеккә индерелде. Ер реформалары барышында ҡабул ителгән ошо ике документ: референдум һөҙөмтәләре һәм Президент Указы, ер мөнәсәбәттәрендәге көсөргәнешлекте тулыһынса бөтөрҙө. Бындай референдум Рәсәйҙә тәүге тапҡыр үткәрелде һәм ул йәмәғәтселектә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты.

Реформалар барған ун йыл эсендә ер мөнәсәбәттәренең бик күп мәсьәләләре хоҡуҡ нигеҙендә тейешенсә хәл ителде. Улар иҫәбендә тиҫтәнән ашыу ер тураһында закон һәм реформаның әлеге этабына ныҡлыраҡ тап



05-2001.p65 81 27.07.01, 12:06

килгән икенсе Ер кодексы, «Ер өсөн түләү тураһында», «Ер кадастры тураһында», «Ерҙе арендаға алыу тураһында», «Ер тураһында закондарҙы боҙған өсөн яуаплылыҡ тураһында», «Крәҫтиән (фермер) хужалығы тураһында» һәм башҡа закондар бар.

«Башҡортостан Республикаһы граждандарының шәхси ярҙамсы хужалығы» тураһында мөһим һәм кәрәкле закон ҡабул ителде. Ер реформалары барған йылдарҙа республикала шәхси ярҙамсы хужалыҡтарҙы үҫтереүгә ҙур иғтибар бирелә килде. Әле тәүге Ер кодексында уҡ шәхси хужалыҡтарға 1,5 гектар ер, икенсеһендә һәр хужалыҡҡа 3 гектарға тиклем ер биреү ҡаралған. Шәхси ярҙамсы хужалыҡтар өсөн ер майҙандарын арттырыу уларҙың республикабыҙ ауыл хужалығындағы тулайым етештереү күләмен 20 проценттан 50-гә еткерергә һәм аҙыҡ-түлек етештереү күләмен тотороҡло итергә мөмкинлек бирҙе. Реформалар барған осорҙа республика граждандары йәшелсә һәм емеш баҡсалары өсөн ер участкалары менән тулыһынса тәьмин ителде. Республиканың бөтә ҡалаларына өҫтәмә ер фондтары бүленде һәм ҡалаларҙың яңы сиктәре билдәләнде. Ерҙе файҙаланған өсөн түләү индерелгәндән һуң республика бюджетына ингән аҡсаның 1,5 процентын ер өсөн түләүҙәр тәшкил итә. Республика граждандарына 4 000 гектарҙан ашыу ер шәхси милек булараҡ бирелде.

Әммә ерҙе һатыу-һатып алыу маҡсатында ашығыс рәүештә шәхси милеккә әйләндерергә тырышыу әлегә юҡ.

Ер реформалары барышында ер ресурстарына идара итеүҙәге яңылыҡ булараҡ, ауыл хужалығы ерҙәре ҡала, ҡасаба, ауыл советтары һәм урындағы хакимиәттәр ҡарамағына бирелде. Был ерҙе рациональ файҙаланыу өсөн яуаплылыҡты байтаҡҡа арттыра.

Дөйөм алғанда, ергә хоҡуҡи йәһәттән идара итеү, уны ҡабаттан бүлеү мәсьәләләрендә республика етәкселегенең ер реформалары барышының әлеге этабында билдәле дәрәжәлә һаҡ булыуын ыңғай баһаларға мөмкин. Әммә реформалар барышында ауыл хужалығы предприятиеларына һәм фермер хужалыҡтарына тапшырылған ерҙәрҙең уңдырышлығы Рәсәй буйынса ла, Башҡортостанда ла ныҡ түбәнәйҙе.

Баҫыуҙарҙың уңдырышлығы бик күп факторҙарға бәйле. Шуларҙың иң мөһимдәре: тәбиғи уңдырышлыҡ, агроклиматик факторҙар, техника менән тәьмин итеү, химик эшкәртеү һәм мелиорация кимәле, ҡулланылған агротехника.

Беҙ 80-се йылдарҙа Ауыл хужалығы министрлығында күп йыллыҡ тикшереүҙәр үткәреү һөҙөмтәһендә шуны асыҡланыҡ: республикабыҙҙағы һөрөнтө ерҙәрҙең уртаса тәбиғи уңдырышлығы гектарынан 14,3 центнер тәшкил итә. Ҡара тупраҡлы ерҙә уңыштың 55 проценты минераль ашламалар индереүгә бәйле. Ҡалған бөтә факторҙар, йәғни үҫемлектәрҙең сорты, агротехника һәм үҫемлектәрҙе һаҡлау саралары һ.б. 45 процент тәшкил итә, көлһыу тупраҡтарҙа иһә уңыш 70 процентҡа минераль ашламалар индереүгә бәйле.

Һөҙөмтәлә беҙ 1999 йылда уңыш гектарынан 14 центнер һәм 2000 йылда 13 центнер буласаҡ тип фараз иткәйнек. Ҡышҡы осорҙа асыҡланған мәғлүмәттәр тулыһынса аҡланды. Был иһә республикабыҙҙың ауыл хужалығының төп тармағы булған иген етештереүҙең тупраҡтың тәбиғи уңдырышлығына бәйле булыуы хаҡында һөйләй. Мәҫәлән, бер килограмм минерал ашлама 5-6 килограмм өҫтәмә иген уңышы бирә. Ошо нигеҙҙә гектарынан 20 центнер уңыш алыу өсөн йыл һайын 100 килограмм ашлама индерергә кәрәк. Ә асылда нисек һуң? Һуңғы 5 йыл дауамында бер гектарға ни бары 100 килограмм ашлама индерелгән. Ә Германияла, мәҫәлән, йыл һайын 670 килограмм индерелә. Башҡортостан Республикаһы ерҙәренән даими рәүештә уңыш алыу өсөн һәр гектарға 5-6 тонна иҫәбенән органик ашлама индереү мөһим, ә беҙҙә һуңғы 5 йылда бөтәһе 5 тонна ғына индерелгән. Әсе тупраҡтарҙы эзбизләү эше лә нигеҙҙә туҡталған, эрозияға ҡаршы саралар үткәрелмәй. Бына 20-25 йыл тупраҡтың һәм ауыл хужалығының ер төҙөлөшө тикшерелмәй. Ерҙәрҙе һуғарыу техникаһы ла юҡҡа сығып бара.

Тупраҡтан туҡлыҡлы матдәләрҙе алыу уға ашлама индереүҙән 4 тапҡырға артып китә.

Башҡортостан Республикаһының ауыл хужалығы баҫыуҙан алып ҡайтыуға ғына эшләй, ә алмашҡа бер нәмә лә бирмәй. Башҡортостанда минераль ашламалар етештереүсе Мәләүез һәм Салауат заводтары бар, әммә улар



05-2001.p65 82 27.07.01, 12:06

етештергән продукция республиканан ситкә китә. Республика бөтә төр гербицидтарҙы һәм башҡа төр үҫемлектәрҙе һаҡлау сараларын үҙе етештереүгә һәләтле, ләкин ауыл хужалығы уларға ҡытлыҡ кисерә. Механизация ауыр хәлдә. Бындай шарттарҙа ер реформалары ауыл хужалығы продукцияларын етештереү буйынса тик шәхси ярҙамсы хужалыҡтарҙа һәм граждандарҙың баҡсаларында ғына ыңғай һөҙөмтә биреүе ихтимал. Унда ла ҡул көсө сиктәрендә генә. Күрәһең, яҡын киләсәктә беҙҙең алда ер һатыу-һатып алыу мәсьәләһе тормаясаҡ. Алда беҙҙе ауыл хужалығы производствоһының һәм халыҡты аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеүҙең кәмеүе көтә.

Уларҙы иһә бер ер реформаһы менән генә хәл итеү мөмкин түгел. Уны комплекслы хәл итергә кәрәк. Республикала бындай мөмкинлектәр бар.

*Иршат ТЕЛӘҮЕМБӘТОВ,*
*журналист*



05-2001.p65 83 27.07.01, 12:06